*Мирас ИҘЕЛБАЕВ*

# Ҡарас сәсән

Ҡарас сәсән тураһында халыҡ телендә легенда-риүәйәттәр йәшәп килә. Уларҙың таралыу ерлеге киң генә, хәҙерге Учалы—Баймаҡ районларын үҙ эсенә ала. Заманында Ҡарас сәсән менән З.Вәлиди ҡыҙыҡһынған. 1969 йылда фольклорсы Ә.М.Сөләймәнов телсе-ғалим И.Ғ.Ғәләүетдиновтан Ҡарастың ҡаҙаҡ батыры Аҡса менән әйтешеүенә бәйле легенда яҙып ала (Башҡорт халыҡ ижады: Эпос. Өсөнсө китап. — Өфө: Башҡ. кит. нәшр., 1981. — 306-сы бит). Уҡытыусы И.Шәрипов: ”Мин ололарҙан Ҡарас сәсән тураһында ишеткәнем булды”, — тип яҙа һәм уның ҡәбере табылыуы тураһында хәбәр итә: Учалы районы Науруз (Науырҙа) ауылының иҫке зыяратында икән. Ошо ауыл эргәһендә ”Аҡсатүбә” тип йөрөтөлгән түбә лә бар — Ҡарастың Аҡса батырҙы еңгән һәм ерләгән урыны. Науруз ауылы элек Ҡушкилде тип йөрөтөлгән (Шәрипов И. Ҡарас сәсән // ”Башҡортостан”. — 5 ғинуар, 2000 йыл). Белеүебеҙсә, Ҡарастың атаһы ла Ҡушкилде булған.

Шулай ҙа Ҡарас сәсән хаҡында беҙгә билдәле булған төп мәғлүмәттәр ике генә сығанаҡҡа ҡайтып ҡала. Береһе — 1925 йылда Ғ.Вилданов ”Башҡорт аймағы” журналының 1-се һанында баҫтырған ”Башҡорт ҡашҡалары” исемле әҫәр (78—86-сы биттәр). Заманында Науруз ауылынан Ғүмәр Күкбирҙин тигән кеше Ҡарас батыр тураһында Ғәбделғәзиз Наурузовтың һөйләүенән яҙып алып, ”Башҡорт мәргәндәре” исемле бер тарихи әҫәренә индергән. Ул яҙма аҙаҡ Ғ.Байгазин, Ә.Солтанов ҡулдары аша үтеп, Ғ.Вилдановҡа килеп юлыҡҡан. Икенсеһе — 1917 йылда хәҙерге Баймаҡ районының Бәләкәй Этҡол ауылында Хәмит сәсәндән М.Буранғолов яҙып алған легенда. ”Башҡорт халыҡ ижады”ның легендалар һәм риүәйәттәр томдарына ул ”Ҡарас менән Ҡараһаҡал” тигән баш аҫтында ингән (1980, 175—176-сы биттәр; 1997, 187—188-се биттәр). Шуларға таянып, Ҡарастың кем булғанын әҙмекүпме күҙ алдына баҫтыра алабыҙ.

”Хәҙерге Тамъян-Ҡатай кантоны Науруз ауылы башҡорттарының төп аталары Айбағош, Көнбағош исемле ике туған булған, — тиелә ”Башҡорт ҡашҡалары”нда. — Айбағоштан Килдеш исемле мәргән тыуып, заманында тиңһеҙ булған. Ҡушкилденән Ҡарас исемле бер улан ҡал-

ған” (”Башҡорт ҡашҡалары”, 78—86-сы биттәр; Башҡорт халыҡ ижады: Эпос. Өсөнсө китап. — 75—78-се биттәр, 305—307-се биттәр; Буранғолов М. Сәсән аманаты. — Өфө: ”Китап”, 1995. — 46—52-се биттәр. — Артабан ошо сығанаҡтар файҙаланыла). Атаһынан йәп-йәш көйөнә етем ҡалған Ҡарас Килдеш ағаһы менән бергә үҫкән, ”атаһы һымаҡ уҡ-һаҙаҡҡа бирелеп, йәштән батыр исемен алып, һәр ваҡыт Килдеш батыр менән бергә яу ҡайтарып, яу сабып йөрөгән. Боронғо киң тормошта мәргәндәр йыйылышып майҙан тотҡанда, Килдеш менән Ҡарастан алда һис кем булмаған”. Белеүебеҙсә, XVIII быуаттың беренсе яртыһына ҡағылышлы документтарҙа Килдеш сәсәндең исеме осрай. Шул Килдеш түгелме? Ике ағай-энене сәсәнлек һәм батырлыҡ рухы үҙ-ара яҡынайтыуы бик ихтимал. Айбағош менән Көнбағош та беҙгә таныш: Ҡобағоштоң улдары шул исемле була. ”Ҡобағоштоң Ҡарасҡа ҡатнашлығы бармы?” тигән һорауға М.Буранғолов үҙ фаразы менән яуап бирә: ”Шундайыраҡ шәжәрә барлыҡҡа килә: Ҡобағош, уның улы Көнбағош, уның улы Ҡушкилде, уның улы Ҡарас”. Хәмит сәсән легендаһында ла Ҡарастың исеме Ҡобағошҡа бәйләп телгә алына: ”Меңгә баш булып, Димде һыулаған, хандар менән сайҡашып, илен-һыуын ташлап, Уйташта өй төккән Ҡобағош сәсәндең ярсығы Ҡарас сәсән бар”. Ҡарас та, нуғай дәүере йырауҙары һәм Ҡобағош кеүек үк, үҙ төбәгендә халыҡҡа (ырыуына) юлбашсы булып йәшәгәнгә оҡшай. ”Иҙел башы Ирәмәлгә, Яйыҡ башы Уйташҡа баш”, ”ул — ҡая-урман атаһы”, тип әйтелә ошо уҡ легендала.

Ҡарас сәсәндең йәшәгән ваҡыты XVII быуаттың икенсе яртыһы — XVIII быуаттың беренсе яртыһы тирәһе булырға тейеш. Аҡса батыр менән әйтеше теркәлгән ҡулъяҙмала: ”Ваҡиға 1750 йылдарҙа булған” тигән һүҙҙәр бар. Әйтештең йөкмәткеһенән сығып ҡарағанда, ул саҡта Ҡарас әле бик йәш булған. Ә Ҡараһаҡал яуы алдынан иһә (30-сы йылдарҙың аҙағы), күреүебеҙсә, оло кеше, башлыҡ, ил исеменән һүҙ әйтерлек хоҡуғы булған, исеме танылған сәсән. Ҡараһаҡал янына кәңәшкә йыйылған аҡһаҡалдар араһынан берәү уға: ”Һин — ил теле”, — тип өндәшә. Сәсән үҙе лә быны аңлай: ”Дөрөҫ әйтәһең. Ил ауыҙын асһа — мин тел”. Тимәк, әгәр Ҡарастың Ҡараһаҡал менән осрашыуын дөрөҫкә алһаҡ, уның Аҡса менән әйтешеүе Ҡараһаҡал яуынан унлап йылға һуңыраҡ түгел, ә байтаҡҡа алдараҡ, бәлки, быуат башында уҡ булып үткән. ”1750 йылдар” тип яңылыш күрһәтелеүе ихтимал.

Ҡарастың сәсән һәм батыр һыҙаттары телмәрҙәрендә тулыраҡ асыла. Аҡса батыр менән әйтешеү шарттары Шалғыйыз йырауҙың ”Ир Шобан” әҫәрендәге хәлдәргә ауаздаш. Берҙән-бер көндө йөҙләп ҡаҙаҡ башҡорттарҙың Яйыҡ буйында, хәҙерге Науруз ауылы яны туғайында йөрөгән йылҡы көтөүен ҡыуып алып китергә ниәтләй. Быны ишеткән Ҡарас, утыҙлап һыбайлы эйәртеп, ҡаҙаҡтарҙың эҙенән төшә. Барып еткәс, яңғыҙы барымтасыларҙың башлығы алдына сығып, уның менән һөйләшә.

Ҡарастың әйтештәге телмәре өс өлөштән тора. Тәүгеһен әйткәндә, Аҡсаның кем икәнен белмәй әле. ”Ир Шобан”да Шалғыйыз Шобандың юлдаштарына берәм-берәм характеристика биреп, батырлыҡтарын

тасуирлаған кеүек, Ҡарас та дошманын үҙенең данлыҡлы исеме менән таныштыра; "Ҡарасҡа ҡул һуҙғандай ниндәй ирһең?" — тип аптырай. Килгәнһең икән, "һырт биреп, ҡурҡаҡтарса" ҡаса күрмә, "батыр булһаң, бирсе киҙәк", — тип, алышырға саҡыра. Телмәрендә үҙен дошманынан күпкә өҫтөн ҡуя, алышта уны еңеүендә шикләнмәй:

Атыңды әйт, был донъянан юярмын мин,
Уғымды ҡыҙыл ҡанға буярмын мин.
Үҙ илеңдә аша торған батыр булһаң,
Хур итмәй, тәрбиәләп ҡуярмын мин.

Аҡсаның да батырлыҡ даны үҙ иленә, күрше ҡалмыҡтарға, ҡаҙаҡ ханы йортона таралған икән:

Алты Алаштың эчендә,
Аҡча батыр дигәндә,
Абылай хандың нәүкәре
Йығылышты атындан.

Ҡарастан ул байтаҡҡа оло, тәжрибәле, һалҡын ҡанлы. Йәш батырҙың "саяндай саға һөйләгән" әсе теленән хәтере ҡалып бармай, "уттай геүләп янған" егетте һыуындырырға тырыша, кире ҡайтып китергә өгөтләй:

Ҡан түкмәй, балам, ҡайта бир
Ҡыҙыулап килгән жулыңдан,
Тартмай үлем жазасын.
Батырға кергән күп малды
Йөҙ ҡоралды ҡаҙаҡтан
Жалғызың нәғлеб аласың?

Әлбиттә, үҙ бәҫен белгән ике батыр осрашҡас, уларҙың бәрелеше — ҡотолғоһоҙ. Йола буйынса, беренсе киҙәк — ҡыуғындыҡы. Йәғни, барымтасыларҙы ҡыуа төшкән кеше алышта тәүге уҡты атыу хоҡуғына эйә. Урын һайлап, алышҡа әҙерләнәләр. Йәш батыр, ярһыуы ни хәтлем ташып торһа ла, үҙенең еңерендә һис икеләнмәһә лә, ҡан ҡойошһоҙ айырылышыу юлын эҙләй. "Тәүҙә мин уның ҡалъяныңдағы һаҙаҡтарын ҡыра атайым: мәргәнлегемде күреп, бәлки, ҡан түкмәйенсә, малды именлек менән генә ҡалдырып китерҙәр", — тип хәл итә ул.

Икенсе телмәр ҡоралына, үҙенә теләк теләүгә ҡоролған. Ауыҙ-тел әҙәбиәтендә бик борондан килгән, әммә Ҡарасҡа тиклемге йырауҙар, сәсәндәр ижадында тулы килеш осрамаған уникаль күренеш. Яу-һунар ғөрөф-ғәҙәттәре заманынан ҡалған йола тәртибен шиғри телмәр менән үтәү былай ҙа батыр, оҫта яугирға өҫтәлмә көс, мәргәнлек биргән, күрәһең. Миҫалға өс строфалыҡ текстың тәүге дүрт юлын ғына килтерәбеҙ:

Йылан башлы киң яным, тартҡан саҡта
Шытырлап һынып китһәң, һиңә намыҫ!

Ҡуҙы яурын, ҡорос башаҡ, бөлдөгөндө,
Тайшайып, ҡырын китһәң, һиңә намыҫ!

Ҡарастың уғынан Аҡсаның ҡалъянындағы һаҙаҡтары "пара-пара туҙып, сыра-сыра юлып, ян-яҡҡа осоп барып төшәләр". Ҡаҙаҡ батыры быға бик ғәжәпләнә, әммә алышты үҙ теләге менән туҡтатырға уйламай. Хәҙер инде киҙәк уныҡы. Аҡса ла икенсе телмәрендә ҡоралына өндәшә. Әйтерһең, йоланы теүәл үтәүҙә лә икәүләп ярышалар... Әммә уның атып ебәргән уғы тоҫҡаған урынға теймәй, "Ҡарас батыр тотоп алып, һаҙаҡты ҡалъянына һала".

Был "уйынды" артабан да дауам итеү мөмкин түгел. Сират Ҡарастыҡы. "Ошо киҙәктән ҡалһам, ниндәй хәл буласағы билдәле түгел" тип, хөрмәт иткән батырының йәнен ҡыйырға мәжбүр ул. Дошман еңелә, йылҡы көтөүе кире ҡайтарыла. Ҡаҙаҡтарҙың батырының батыры менән алышҡан булып сыға Ҡарас. Ҡаршылыҡ күрһәткән дошманданының береһе уға: "Бөтөн ҡаҙаҡты ҡырып бөтөрөп, яңғыҙ Аҡса батырҙы ҡалдырһаң булмаймы?" — ти. Барымта тураһында хәбәр алғанды ишетмәй, "тамаша"ның аҙағына килеп еткән Килдеш ағаһы менән икәүләп "Аҡса батырҙың ятҡан урынын ҡаҙып, күмеп, таштан курган һалып, баш осона һаҙаҡ ҡаҙап" ҡуялар.

Өсөнсө телмәр Аҡсаның батырлығына арнала. Яугирҙар араһында борон-борондан лайыҡлы дошманыңды хөрмәтләү, ҡәҙерләп ерләү йолаһы ла йәшәп килгән, күрәһең. Ҡарас уныһын да еренә еткереп үтәй:

Бынан һуң һинән батыр күрмәҫ күҙем.
Урынлы, маҡтанһаң да, әйткән һүҙең;
Ут йөрәк арыҫландай Аҡша батыр,
Ҡуяйым тәрбиәләп мин дә үҙем.

Ғөмүмән, ауыҙ-тел әҙәбиәтенең донъя кимәлендә таралған боронғо традицияларының (ҡоралға өндәшеү, дошманды хурлау, уның батырлығын хөрмәтләү) Ҡарас телмәрҙәрендә һәм эш-ҡылыҡтарында теүәл сағылыш табыуы бик ҡыҙыҡлы. Тимәк, был традициялар йырауҙар, сәсәндәр араһында үҙ заманында ныҡлы урын алған, быуындан-быуынға күсеп йәшәп килгән; бары тик беҙҙең көндәрҙә билдәле булған импровизацияларына ғына "әләкмәй" ҡалған тигән һүҙ. Батырҙың ҡылысын маҡтау, уға еңеүле фатиха биреү төрки һүҙ сәнғәтендә Ҡорҡот заманынан килә. Ҡорҡот ата үҙе лә был вазифаны башҡара. Алыш алдынан дошман менән һүҙ көрәштереү эпизоды "Ҡорҡот ата китабы"ның икенсе бүлегендә осрай. Көтөүсенең 600 кафыр менән әйтеше Ҡарас менән Аҡсаның телмәрҙәрен хәтерләтә. Сәсәнлек эрудицияһы Ҡарасҡа башҡорт ауыҙ-тел әҙәбиәтенең донъя кимәлендәге ҡаҙаныштары менән һуғарылған традициялары аша ла, нәҫелдән-нәҫелгә лә (Ҡобағош, Килдеш) күсеүе ихтимал.

"Ҡарас менән Ҡараһаҡал" легендаһында Ҡарастың һүҙе сәсмә телмәр менән бирелһә лә (ысынбарлыҡта уның шиғри формала әйтелеүе бик

мөһим), был ваҡытҡа ул, данлыҡлы Ҡобағош, Ерәнсәләр кеүек үк, кинәйәле даими символик образдар менән оҫта эш итеү, фекерен "йомарлап" биреү ҡеүәһенә эйә булған атаҡлы сәсән дәрәжәһенә күтәрелгән. Легенданың сюжеты киң билдәле. Ҡараһаҡал башҡорт ҡарттары, уҙамандары, аҡһаҡалдары менән батшаға ҡаршы яу күтәреү хаҡында кәңәшләшә. Халыҡ икеләнә, Ҡарастың һүҙен көтә. Ә ул ихтилалдың әлегә ваҡытһыҙ икәнен "Эзоп теле" менән әйтеп бирә. Кәңәшкә йыйылғандарҙың күбеһе, шул иҫәптән Ҡараһаҡал да, уны аңламай, ризаһыҙлыҡ белдерә башлай. Шулай булғас, нимәгә иҫәп тотҡан һуң Ҡарас? Моғайын, төркөмдә берәй йәшерәк һүҙ оҫтаһы ҡатнашып, сәсәндең хикмәтле телмәрен бүтәндәргә аңлатып биреүенә өмөтләнгәндер. Ихтимал, уның барлығын сәсән алдан күреп тә ҡалғандыр; бәлки, бер юлы уны оҫталыҡҡа һынап ҡарарға ла теләгәндер. Ил яҙмышы хәл ителгән ерҙән ундай уҙамандар ситтә ятып ҡалмағандарҙыр бит! Ысынлап та табыла бер зирәк аҡыллы кеше. Сәсәндәр телен аңлау өсөн зирәк аҡыл ғына етмәй; күрәһең, "йомарланған" һүҙ асҡысын белгән ауыҙ-тел ижадсыһы ла булғандыр ул. Дөрөҫ, исеме халыҡ араһында таралып өлгөрмәгән. Легендала "**берәү**" тип кенә телгә алына. Бына ошо **берәү** Ҡарастың телен халыҡҡа аңлатып бирә. Ә Ҡарас нимә тигән һуң? Бер юлы уның телмәрен дә, **берәүҙең** аңлатмаһын да килтерәйек.

— Уралда ҡамсы һабына ҡырҡып алыр тал юҡ, ҡырҡа башлаһаң, ҡан сыға. (Урал урмандары яуҙарҙа аҡҡан халыҡ ҡаны менән һуғарылған).

— Уралдағы мәмерйәләр эсенә бүреләр инеп көсөкләгән. (Яуҙа еңелеп, ҡасырға уйлаһаң, барыр ер юҡ, һәр ҡайҙа һағалайҙар).

— Аттарҙың ҡолағына ин, ҡулбашына тамға һалынған. (Бөтә еребеҙ билдәле, ҡайҙа барһаҡ та, тоторҙар).

— Төндә өрөр эттәр үлтерелгән. (Үткән яуҙа ҡатнашҡандарҙы язалап бөткәндәр).

— Ағас башына ҡор ҡунмаған. (Шул уҡ яуҙан һуң ҡасып йөрөүселәр илгә ҡайтып бөтмәгән).

— Ямау һалыр кейем бар микән? (Килгән ҡунаҡ Ҡараһаҡал — сит кеше).

— Ә һуң рус батшаһы һаҡаллы микән? (Илар бала атаһының һаҡалы менән уйнар. Икенсе төрлө әйткәндә, ихтилал еңелер).

Быңдай кинәйәле образдарҙың, образлы фекерҙәрҙең һәр ҡайһыһы тотороҡло мәғәнәгә эйә булып, сәсәндәрҙең профессиональ ҡатламы араһында киң таралған "йәшерен" телмәр системаһын тәшкил иткән, күрәһең. Беҙ бөгөн уның бер "ярсығын" ғына "тотоп ҡарайбыҙ". XVI—XVIII быуаттарҙа, тәүҙә ханлыҡтар ҡыҫымы, аҙаҡ Рәсәйҙең колониаль иҙеүе шарттарында арҙаҡлы һүҙ оҫталарының ошо "йәшерен" теле әйтештәрҙә үҙ-ара аралашыу, хандарға, хакимдарға мөрәжәғәт иткәндә хикмәтле һүҙҙәр менән юрамал уларҙың башын ҡаңғыртыу, кәмһетеү, йәш сәсәндәргә киләсәктә ижади, ижтимағи-сәйәси эшмәкәрлектәренә аманат-традиция ҡалдырыу өсөн хеҙмәт иткән булырға тейеш.